**ҺОРАУ БИРЕҮ – ҒИЛЕМДЕҢ ЯРТЫҺЫ ЙӘКИ ШӨКӨР ИТЕГЕҘ, ШУЛ ВАҠЫТТА ГЕЛ КҮБӘЙЕП ТОРОР**
**АЛЛАНЫҢ РӨХСӘТЕ МЕНӘН**
**(Ырымбур өлкәһе Баҡый ауылы, 2015 йылдың 30 апреле)**

Аллаһ беҙгә, ағай әйтеүенсә, бөтә нимәне лә бирҙе. Иң мөһим нәмә – иман ниғмәтен бирҙе. Бөтә нимәне, иң яҡшы нәмәләрҙе бирҙе, Аллаға шөкөр. Улар бысраҡ нәмәләр (нәжес) эсә. Беҙ таҙа нәмә эсәбеҙ. Беҙҙең, мосолмандың, эсә торған нәмәләре – сәй, айран, һөт, ҡәһүә. Йәғни Аллаһ кешегә ул ләззәтте биргәндән һуң, бөтәһе лә мең тапҡыр яҡшы тегеләр эскән насар нәмәләрҙән. Улар эскән нәмәләр ҡулыбыҙға, кейемебеҙгә тейһә хатта, ҡулды йыуырға, кейемде йыуырға кәрәк.
Бәләкәй саҡта беҙ бындай нәмәләр тураһында белмәй инек. Кеше тилегә әйләнә. Нисек тилегә әйләнә, ти. Иҫерткес эсемлек эсте, тиҙәр. Ул ваҡытта беҙ аяҡ-ҡулы, тәне тилерҙе, тип уйлай инек. Бәләкәй инек, ете-һигеҙ йәштә, ундай нәмәләр бөтөнләй юҡ ине.
Ағай, һорауҙар бирегеҙ, ти. Бәләкәй саҡта мин дә бик күп һорау бирә инем Хажи Әсәйгә. Хажи Әсәй сабыр ғына яуап бирә ине һәр береһенә. Бер тапҡыр янында бер ханым бар ине, әхирәте. Мин йәнә һорауҙар бирәм. Ҡатын әйтә: «ай Аллам, башым ҡатты. Нисек сабыр итәһең быға?» Белмәгәнде һорап белеү, һорау биреү – ғилемдең яртыһы икән. Һорау һорап белмәйенсә эсеңдә шик-шөпһә йөрөтөүгә ҡарағанда яҡшыраҡ.
Һорау биреү – яҡшы. Ҡайһы ваҡыт кеше һорау биреп яңылышлыҡ та эшләп ҡуя. Хасан Басри хәҙрәттәре – бөйөк табиин дарҙың береһе. Хажға барғанда дөйәһен юғалта. Уны эҙләй, кешеләрҙән дә һораштыра. Иң аҙаҡтан бер баланы күреп, унан һорай, дөйәмде күрмәнеңме, тип. Бала күргән. Күрһәткән дөйәнең ҡайҙа икәнлеген. Һөйләшкән арала, үҙе лә, ҡайҙа йәшәйһең, тип һораған Хасан Басри хәҙрәттәренән. Был, бәләкәй генә, бер яҡ стенаһы булмаған (унда һыуыҡ түгел) өйҙә йәшәйем, тигән. Бала быға, һин Алланы зекер итһәң, ғибәҙәт ҡылһаң, теләгән ерҙә йәшәй алаһың, тигән. Нимә ашайһың, тип һораған бала. Арпа икмәге, киптерелгән арпа икмәге, тип яуаплаған тегеһе. Хәләл ризыҡ булһа, теләгән нимәне аша, эс. Был – Алланың күстәнәсе, бәрәкәте, шәфҡәте. Хасан Басри хәҙрәттәре теге балаға, машаАллаһ, бик матур һөйләйһең, бала булмаһаң, тыңлар инем һине, тигән. Бала иһә тегеңә, «донъя өсөн һораның, донъя эшен ҡабул иттең. Дөйәңдең ҡайҙалығын әйттем, уны ҡабул иттең. Әхирәт тураһында һорағас, ҡабул итмәнең», тигән. «Иң яҡшыһы – һин тыуған яғыңа ҡайт, хаж кәрәкмәй һиңә».
Йәғни хәләл булһа, бөтә нимәне лә ашарға мөмкин, хәләл генә булһын. Былар Алланың күстәнәсе, яҡшы нәмәләр. Был ризыҡтарҙы ошондай икәнен белеп ашағанда, йәғни Алланың күстәнәсе, Алланың ниғмәте, таҙа, хәләл икәнен белеп ашағанда, улар нур була кеше тәнендә.
Аллаға шөкөр, әйтеп үтеүебеҙсә, беҙҙең етешмәгән нәмәбеҙ юҡ. Хәләл нәмәләр булғанда башҡа бер нәмәнең дә кәрәге юҡ. Ит тиһәң, иң яҡшыһы – ошо ит, машаАллаһ, башҡа, теге бысраҡ хайуандың итен бөтөнләй ашарға кәрәкмәй. Эсемлек тиһәң, иң яҡшы эсемлектәр ошолар, машаАллаһ. Дәрүиштәр, шәйехтәр, мөьминдәрҙең эсемлеге – ул сәй. Былар башты ауырттырмай, аҡылдан яҙҙырмай, киреһенсә файҙа килтерә. Аҡылынан яҙған кешене психик ауырыуҙар хастаханаһына урынлаштыралар. Бик күп дарыу эсерәләр элекке хәленә ҡайтһын өсөн.
Алланың ниғмәттәре былар. Аллаһ һиңә яҡшыһын күрһәтә, һәйбәтен күрһәтә. Ниғмәттәр бөтмәй, йәғни уларҙы иҫәпләп бөтөрөрләк түгел. Ун, йөҙ, мең, миллион, унда ла бөтмәй, ти Бөйөк һәм Ҡөҙрәтле Аллаһ.
Аллаһ туҡтауһыҙ биреп торһон ниғмәттәрен беҙгә. Шөкөр итегеҙ, шул ваҡытта гел күбәйеп торор Алланың рөхсәте менән. Аллаһ бөтәгеҙҙән дә риза булһын. Үә мин Аллаһу тауфиҡ. Әл-Фатиха.